Башҡортостан Республикаһы Өфө районы муниципаль районы

Шамонин ауылының “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы муниципаль

мәктәпкәсә мәғариф бюджет учреждениеһы

**«ТЫУҒАН ЯҠ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ**

**ҺӘМ ҺҮРӘТ ТӨШӨРӨҮ» темаһына**

**дәрес конспекты**

**(өлкән төркөм)**



**Әҙерләне:**
**Сыңғыҙова Л.Ф.**

**Шамонин ауылы – 2021й.**

**ТЫУҒАН ЯҠ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ ҺӘМ ҺҮРӘТ ТӨШӨРӨҮ.**

**ӨЛКӘН ТӨРКӨМДӘ ИНТЕГРАЦИЯЛЫ ДӘРЕС.**

**Бурыстар:**

**Белем биреүсе:** балаларҙы тыуған яғыбыҙ - Башҡортостандың тәбиғәте – урмандары, күлдәре, туғайҙары һәм һаҙлҡтары, тауҙары тураһында һөйләргә булышлыҡ итеү, ағастарҙы, ҡыуаҡтарҙы, балыҡтарҙы, дарыу үләндәрен айырырға өйрәтеүҙе дауам итеү.

**Үҫтереүсе**: портрет техникаһын камиллаштырыу, һүрәт төшөрөү ысулдарын асыҡлау.

**Тәрбиәләүсе**: тыуған илебеҙгә, унын тәбиғәтенә һөйөү, һоҡланыу тойғоһо Тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу –** слайдтар, призентация, тема буйынса һүрәттәр, карточкалар, төҫлө ҡәләмдәр, ҡағыҙ.

**ДӘРЕС БАРЫШЫ**:

Балалар түңәрәккә тороп һанашмаҡ әйтеп уйнайҙар:

Беҙ, беҙ, беҙ инек.

Беҙ ун ике ҡыҙ инек.

Бер таҡтаға теҙелдек

Таң атҡанса юҡ булдыҡ.

Хап та хоп һуҡыр Яҡуп. (кем өндәшә йә көлә шул фантик бирә)

**Ишек туҡылдаталар. Зөһрә ҡыҙ килеп инә.**

- Һаумыһығыҙ, балалар, мин Зөһрә булам һәм күптән айҙа йәшәйем. Күк йөҙөндә ай ҡалҡыу менән мин һеҙҙе сәләмләйем, бөгөн мин тыуған еремә ҡунаҡҡа килдем.

**Тәрбиәсе:**

- Рәхим ит, Зөһрә ҡыҙ, беҙҙең балалар һиңә Башҡортостандың иң матур, иң күркәм ерҙәре менән таныштырырҙар. Башҡортостан ере тауҙарға,

урмандарға, күлдәргә, йылғаларға бик бай. Зөһрәкәй, әйҙә ошо урманға инеп сығайыҡ.

**1. Урман хужаһы:**

- Әйҙәгеҙ хөрмәтле ҡунаҡтар! Минең урманымда ниндәй генә ағас юҡ. Бына исемдәрен онотҡанымсы. Ярҙам итегеҙ әле.

**Дидактик уйын “Ағасты тап”.**

- Рәхмәт балалар, минең серле һорауһарым бар, йә яуабын әйтегеҙ әле.

Ниндәй ағастан музыка ҡоралдары яһайҙар? (саған)

Шырпыны ниндәй ағастан эшләйҙәр? (уҫаҡ)

Беҙҙең яҡтарҙа иң оҙаҡ йәшәгән ағас? (имән)

Ниндәй ағастың энәләре терпенеке кеүек? (кедр, шыршы, ҡарағас)

**Зөһрә ҡыҙ:**

- Рәхмәт һиңә Урман хужаһы. Бик тә еләҫ, рәхәт икән урманыңда.

**Тәрбиәсе:**

Башҡортостандың данлыҡлы күлдәре менән таныштырып үтәйек.

**(Слайдтар ҡарау)**

- Ә бынһы беҙҙең доньяға танылыу алған Яҡтыкүл.уның һыуыла, бысрағыла бик файҙалы. Күл буйында “Яҡтыкүл шифаханаһы” бар.

**Асылыкүл, Талкаҫ, Граф күлдәре**.

Данияр һөйләй:

- Минең өләсәйем Граф күле буйында йәшәй.ул таҙа, матур күл.күл балыҡтарын ашағығыҙ киләме? Улайһа тиҙ генү ошо һауытҡа һалынған балыҡтарҙы айырып бирегеҙ әле.

**Дидактик уйын “Балыкты йый” - киҫмә һүрәттәр.**

**Зөһрә ҡыҙ:**

- Миңә күлдәрҙә бик оҡшаны.

**Тәрбиәсе:**

- Юлыбыҙҙы артабан дауам итәйек**.**

**Туғай феяһы менән осрашыу:**

- Рәхим итегеҙ, минең туғайыма, минең туғайымда күп төрлө үләндәр, сәскәләр үҫә.Улар барыһы ла дарыу үләндәре. Балалар, ҡайһы сәскә “**Ҡыҙыл китапҡа”** индерелгән? (умырзая,ҡыңғырау сәскә, ынйы сәскәһе, андыҙ, томбойоҡ – һүрәттәр араһында кәрәкле сәскәләрҙе һайлап алыу)

**Тәрбиәсе:**

- Әйҙәгеҙ рәхим итегеҙ Шамонино ауылына. Беҙҙең ауыл киптерелгән һаҙ эсенә төҙөлгән, һаҙ - ул күп һыулы ер, ул да тәбиғәткә бик кәрәк, һаҙлыҡ ерҙәрҙе тәлмәрйендәр, ҡауҙылар, өйрәктәр ярата.

Шиғыр: күл буйында сәйер тауыш,
Һыу инәһе, әллә ен,
Түгел, түгел, тын кистәрҙә
Йырын һуҙа тәлмәрйен.

**(Слайдтар, һүрәттәр ҡарау )**

**Тәрбиәсе:**

- Башҡортостанда күп, бейек тауҙар бар. (слайд ҡарау - Шүлгәнташ мәмерйәһе). Шүлгәнташ мәмерйәһендә өс зал бар.беренсе залда зәңгәр күл, икенсе зал – сталагмиттар залы, өсөнсөһө - һүрәттәр галереяһы.был бик ҙур зал, шуға күрә лә боронғо кешеләр ошо ерҙе һүрәт төшөрөр өсөн һайлағандар һәм йөнтәҫ аттар, мамонтар төшөргәндәр.

**Тәрбиәсе:**

- Йә, Зөһрәкәй, оҡшанымы һиңә тыуған ерең? Бәлки һин ерҙә ҡалырһың?

**Зөһрә:**

- Юҡ, мин ҡала алмайым, мине кешеләр айҙа күреп ғәҙәтләнгәндәр,

мине күрмәһәләр улар шомланырҙар.мине күрһәләр тынысланалар.

**Тәрбиәсе:**

- Ярай, улайһа, балалар Зөһрә ҡыҙ бик алыҫта, уны иҫләп ҡалыр өсөн уның портретын эшләйек. Зөһрә һин ултыр ултырғысҡа, беҙҙең балалар, оҫта рәссамдар, һә тигәнсә һине һынландырып та ҡуйырҙар.

- Балалар, портрет төшөрөр өсөн усты ҡағыҙға һалып юллатып сығабыҙ, был кешенең йөҙө, ҡәләм осо менән уны биш өлөшкә бүләбеҙ, беренсе өлөш - сәс, икенсеһе - күҙҙәр, өсөнсө - танау, дүртенсе – ирендәр, бишенсеһе-эйәк, һомғол муйын һәм күлдәктең өҫ яғы, портретҡа тағы ла рама эшләргә онотмағыҙ.

Беҙ бөгөн нимә менән шөғөлләндек? Һеҙгә нимә оҡшаны нимә оҡшаманы?

Зөһрә ҡыҙ ҡайһы портрет һиңә оҡшаған?

Зөһрә ҡыҙ һау булып тор, тағы ла кил ҡунаҡҡа.

Сыңғыҙова Л.Ф.